БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ ҠЫРМЫҪҠАЛЫ РАЙОНЫ
МУНИЦИПАЛЬ РАЙОН МАЛАЙ АУЫЛЫНЫҢ ТӨП ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮ
МӘКТӘБЕ МУНИЦИПАЛЬ БЮДЖЕТ ТӨП ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ

«Ҡаралған»
ММБ етәксеһе
Ғәйфуллина М.Р.
1-се протокол
1 август 2021й

«Раҫлайым»
Мәктәп директоры
Ғәйфуллин Ғ.Й.
Бойороҡ һаны 136 1.08.2021й

МОБУ ООШ Д.МАЛАЕВО

# Туған башҡорт теле предметынан 5 - 9 класс өсөн 2021-2022 уҡыу йылына эш программаһы

Төҙөүсеһе : Ғәйфуллина Миләүшә Радик ҡыҙы
юғары категориялы башҡорт теле һәм
әҙәбиәте уҡытыусыһы

2021 йыл

## I.Туған башҡорт теле предметын өйрәнеүҙең планлаштырылған һөҙөмтәләре

Туған башҡорт теле программаһын өйрәнеүҙең шәхси һөҙөмтәләре булып түбәндәгеләр тора:

- башҡорт телен башҡорт халҡының төп милли–мәҙәни ҡиммәте булараҡ аңлау, интеллектуаль, ижади һәләтлектәрен һәм шәхестең мораль-этик сифаттарын үҫтереүҙә туған телдең ролен, уның мәктәптә белем алыу процесындағы әһәмиәтен билдәләү;

- башҡорт теленең  эстетик ҡиммәтен аңлау; туған телгә ҡарата ихтирам, һөйөү, уның менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү; милли-мәҙәни сағылыш булараҡ,  башҡорт теленең таҙалығын һаҡлау тураһында хәстәрлек күреү; үҙ телмәреңде камиллаштырыуға ынтылыу;
- аралашыу процесында кәрәкле һүҙлек запасына эйә булыу һәм үҙ фекереңде иркен еткереү өсөн тейешле грамматик сараларҙы үҙләштереү; үҙ телмәреңде күҙәтеү һәм уны баһалау күнекмәһе булдырыу.
Туған  башҡорт теле программаһын өйрәнеүҙең метапредмет һөҙөмтәләре:
1) телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен үҙләштереү:
- телдән һәм яҙма хәбәр иткән мәғлүмәтте (коммуникатив йүнәлеш, текст темаһы, төп фекер; төп һәм өҫтәмә мәғлүмәт) адекват ҡабул итеү;
- уҡыуҙың төрлө төрҙәрен үҙләштереү;
- төрлө сығанаҡтарҙан, шул иҫәптән ваҡытлы матбуғат сараларынан, уҡыу ҡулланмаһы булараҡ компакт дискыларҙан, интернет-ресурстарҙан мәғлүмәтте һайлап алыу һәләтлелеге;
- һайлап алыу алымдары менән эш итә белеү һәм тәғәйен темаға материалды системаға килтереү; уҡыу йә аудирование һөҙөмтәһендә, шулай уҡ техник саралар һәм мәғлүмәти технологиялар ярҙамында мәғлүмәтте үҙ аллы эҙләй ала белеү, уны анализлау һәм һайлап алыу; ҡайтанан эшкәртеү, һайлай һәм еткерә белеү;
- алдағы уҡыу эшмәкәрлегенең (индивидуаль һәм коллектив) маҡсатын билдәләү һәләтлелеге, эштең эҙмә-эҙлелеге, өлгәшелгән һөҙөмтәләрҙе баһалау, уларҙы телдән һәм яҙма формала адекват, аныҡ итеп әйтеү;
- телдән һәм яҙма формала үҙ фекереңде иркен еткерә еткерә белеү; тыңланған йәки уҡылған тексты тәҡдим ителгән кимәлдә (план, һөйләү, конспект, аннотация) һөйләй алыу;
- үҙ тиңдәштәрең аудиторияһында ҙур булмаған доклад, хәбәрҙәр менән сығыш яһай белеү;
2) алынған белем һәм күнекмәләрҙе көндәлек тормошта ҡуллана белеү; туған телде башҡа төрлө фәндәрҙән белем алыу сығанағы булараҡ файҙаланыу; тел күренештәрен анализлау буйынса алған белем һәм күнекмәләрен предмет-ара (сит тел, әҙәбиәт һәм башҡа дәрестәрҙә) ҡулланыу;
3) аралашыу процесында тирә-яҡтағы кешеләр менән коммуникатив маҡсатлы бәйләнештә ниндәйҙер бер эш төрөн бергә башҡарыу, бәхәс, фекер алышыуҙа ҡатнашыу, формаль һәм формаль булмаған шәхес-ара һәм мәҙәни-ара аралашыу барышындағы төрлө ситуацияларҙа телмәр этикетының милли-мәҙәни нормаларын үҙләштереү.
Предмет һөҙөмтәләре:
1) башҡорт теленең башҡорт халҡының милли теле, Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булыуы тураһында, тел менән халыҡ мәҙәниәтенең бәйләнештәре тураһында, туған телдең кеше һәм йәмғиәт тормошондағы роле тураһында ҡараш булдырыу;
2) шәхестең интеллектуаль һәм ижади һәләтен үҫтереүҙә, белем алыуҙа, шулай уҡ үҙ-үҙеңде камиллаштырыу процесында башҡорт теленең билдәле ролен аңлау;
3) телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен үҙләштереү:
аудирование (тыңлау)һәм уҡыу:
- телдән һәм яҙма бирелгән мәғлүмәтте (маҡсат, тексттың темаһы, төп һәм өҫтәлмә мәғлүмәт) адекват ҡабул итеү;
- төрлөсә уҡыу күнекмәләрен булдырыу (эҙләнеү, ҡарап сығыу, танышыу, өйрәнеү); төрлө стилдәге, жанрҙағы текстарҙы үҙләштереү;
- уҡылған текстағы (план, тезис) мәғлүмәтте ҡайтанан эшкәртеү күнекмәләрен; китап, ваҡытлы матбуғат менән эшләү ысулдарын үҙләштереү;
- төрлө типтағы һүҙлектәр, белешмә өсөн әҙәбиәт, шулай уҡ электрон ҡулланмалар менән иркен ҡулланыу;
- төрлө стилдәге һәм жанрҙағы текстарҙы телдән адекват ҡабул итеү; аудированиеның (аудиотексты тулыһынса аңлау, уның төп йөкмәткеһен аңлау, мәғлүмәтте һайлап алыу) төрлө төрҙәрен үҙләштереү;
- үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, йөкмәткенән һәм ҡулланылған тел сараларынан сығып, фекерҙе сағыштыра алыу;
һөйләү һәм яҙыу:
- тыңланған һәм уҡылған тексты телдән һәм яҙма формала тәҡдим ителгән кимәлдә (йөкмәткеһен һөйләү, план, конспект) һөйләй алыу;

- телдән һәм яҙма формала үҙ фекереңде дөрөҫ һәм иркен еткерә алыу, тексты логик яҡтан эҙмә-эҙлекле төҙөү нормаларын һаҡлау; факттарға һәм үҙеңде уратып алған ысынбарлыҡ күренештәренә, уҡылған һәм ишеткәндәргә үҙ мөнәсәбәтеңде адекват сағылдырыу;
- төрлө телмәр стилендә һәм төрлө жанрҙарҙа (аралашыу ситуацияһына ҡарап) телдән һәм яҙма текст төҙөй белеү; төрлө телмәр стилендә һәм төрлө жанрҙарҙа (хикәйә, хат, ғариза, баһалама, ышаныс ҡағыҙы, расписка) яҙа белеү, аралашыу бурыстарынан сығып, тел һүрәтләү сараларын иркекле рәүештә һайлау;
- төрлө төрҙәге монолог һәм диалогты үҙләштереү; ҙур булмаған хәбәрҙәр, докладтар менән үҙ тиҫтерҙәрең алдында сығыш яһау;
- ғәмәлдә төрлө телмәрҙәге аралашыуҙың орфоэпик, лексик, грамматик хәҙерге башҡорт теленең стилистик нормаларын һәм яҙма телмәрҙә төп орфографик һәм пунктуацион нормаларҙы һаҡлау; лексика һәм фразеологияны стилистик яҡтан корректлы ҡулланыу; яҙыуҙа орфография, пунктуацияның төп ҡағиҙәләрен һаҡлау;
- телмәр этикеты нормаларын һаҡлап аралаша алыу, аралашыуҙың төрлө тормош ситуацияларында ым-ишара, мимиканы урынлы ҡулланыу;
- уҡыу процесында һәм көндәлек аралашыуҙа үҙ телмәреңде контролдә тота алыу;
- йөкмәткенән, һүҙҙәрҙе урынлы ҡулланыуҙан сығып, үҙ телмәреңде баһалай белеү;
- грамматика һәм телмәр хаталарын таба, уларҙы төҙәтә алыу;
- үҙ тексыңды мөхәррирләү һәм камиллаштыра белеү;
4) туған тел тураһында төп фәнни нигеҙҙе үҙләштереү; уның кимәл һәм берәмектәр бәйләнешен аңлау;
5) тел ғилеменең төп аңлатмалары: лингвистиканың һәм уның төп бүлектәре: тел һәм телмәр, телмәр аралашыуы, һөйләү һәм яҙма телмәр, монолог, диалог һәм уларҙың төрҙәре; аралашыу ситуациялары, фәнни, публицистик, рәсми йәки эш ҡағыҙҙары стилдәре, матур әҙәбиәт теле; функциональ-мәғәнәүи телмәр төрҙәре (хикәйәләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү); текст төрҙәре; телдең төп берәмектәре, уларҙың билдәләре һәм телмәрҙә ҡулланыу үҙенсәлектәрен үҙләштереү;
6) һүҙгә төрлө анализ төрҙәрен (фонетик, морфологик, һүҙьяһалыш, лексик, морфологик), һөйләм һәм һүҙбәйләнешкә синтаксик анализ: йөкмәтке, төп билдә һәм структура, тел һүрәтләү сараларын ҡулланыуҙы иҫәпкә алып, тексты анализлау;
7) туған телдең эстетик функцияһын таныу, матур әҙәбиәт текстарын анализлағанда телмәрҙең эстетик кимәлен баһалау.
Регулятив универсаль уҡыу эшмәкәрлеге.
- эшмәкәрлек маҡсатын ҡуя һәм аныҡ итеп әйтә белеү;
- эшмәкәрлекте эҙмә-эҙлекле планлаштыра һәм кәрәк саҡта үҙгәртә белеү;
- үҙ контроль, үҙ баһа, үҙеңде төҙәтеүҙе тормошҡа ашырыу.
Танып белеү универсаль уҡыу эшмәкәрлеге.
- проблеманы асыҡлау, дөрөҫ дәлилләй белеү;
- логик яҡтан төҙөк фекер йөрөтөү, иҫбатлау табыу, раҫлаусы йәки кире ҡағыусы тезис килтереү;
- библиографик эҙләнеүҙе тормошҡа ашырыу, төрлө сығанаҡтарҙан кәрәкле мәғлүмәтте алыу, төп һәм өҫтәмә мәғлүмәтте билдәләү;
- уҡыу маҡсатын асыҡлау, аралашыу маҡсатынан сығып уҡыу төрөн һайлау;
- мәғлүмәти-компьютер сараларын ҡулланыу;
- мәғлүмәтте системаға һалыу һәм ҡайтанан эшкәртеү һәм уны төрлө ысулдар аша күрһәтеү.
Коммуникатив универсаль уҡыу эшмәкәрлеге.
- телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәре менән эш итеү;
- тыңдаштәре һәм оло кешеләр менән аралашыуҙы ойошторооу;
- телдән һәм яҙма телмәрҙе аңлы рәүештә ҡабул итеү;
- ҡуйылған проблема буйынса үҙ ҡарашыңды теүәл, дөрөҫ, логик яҡтан төҙөк итеп әйтеп биреү.
Уҡыусы өйрәнәсәк:
- көндәлек тормошта һәм уҡыу эшмәкәрлегендә туған телде аралашыу сараһы булараҡ үҙләштерергә;
- башҡарыласаҡ эштең маҡсатын аныҡ итеп билдәләй белергә;
- төрлө типтағы лингвистик һүҙлектәрҙән, сығанаҡтарҙан, Интернеттан тейешле мәғлүмәтте алыу һәм эшкәртеү кеүек эштәрҙе үҙләштерергә;

- яҙма һәм һөйләү телмәрен, телмәр эшмәкәрлеге төрҙәрен, аралашыуҙың төрлө ситуацияларында телде ҡулланыу ҡағиҙәләрен, телмәр этикет нормаларын үҙләштерергә.
Уҡыусы ошоларҙы белергә мөмкинселек ала:
- тел системаһы төҙөлөшөн һәм уның хәрәкәттә булыуын;
- әҙәби тел нормаларын күҙәтеү,
- яҙыу һәм һөйләү;
- телмәрҙәге грамматик саралар;
- төрлө шарттарҙа телде ҡулланыу ҡағиҙәләре.
Уҡыусы ошоларға өйрәнергә мөмкинселек ала:
- үҙ контроль һәм үҙ-ара контроль;
- ҡысҡырып уҡыу, тасуири уҡыу, уҡығанды тыңлау һәм йөкмәткеһен һөйләү, яттан һөйләү һәм яҙыу, диалогтар ҡороу, ролләп уҡыу, кәрәкле сығанаҡтарҙан мәғлүмәттәрҙе табыу һәм уны эшкәртеү, Интернет менән файҙаланы;
- үҙ аллы ижади эшмәкәрлек, йөкмәткене сағыштырыу һәм анализлау, төрлө стилгә ҡараған текстарҙы күҙәтеү һәм айырыу.
Телмәрҙә грамматик сараларҙы, алынған белемде, күнекмәләрҙе аралашыу процесында, уҡыу эшмәкәрлегендә һәм көндәлек тормошта ҡулланыу һәләтлеген камиллаштырыу.

II. 5-9 –сы класс уҡыусылары төп дөйөм биреү курсын өйрәнгәндән һуң түбәндәге һөҙөмтәләргә ирешергә тейеш:

Аудирование:
- текстан алған мәғлүмәттрҙе тезис, конспект, резюме формаһында яҙырға,тулы йәки ҡыҫҡаса һөйләргә;
- текст буйынса һорауҙар төҙөргә;
- үҙенең йәки иптәштәренең телмәрҙәрендәге хаталарҙы билдәләргә.
Уҡыу:
- аралашыу өсөн бирелгән тексттың темаһын аңларға, тексты дөрөҫ уҡырға;
- уҡыған тексттың конспектын төҙөргә;
- тексттың йөкмәткеһен аңлау кимәлен баһаларға.
Һөйләү:
- әҙәп-әхлаҡ, социаль-көнкүреш, социаль-мәҙәни һәм башҡа өлкәләге көнүҙәк темаларға монологик телмәр төҙөргә;
- ҡатмарлы һорауҙарға фәнни нигеҙҙә фекерҙәрен ойоштороу;
- үҙ фекерҙәрен телдән төҙөгәндә, түбәндәгеләрҙе белергә тейеш:
тема, идеяның тап килеүен, теманы тулы килеш аса алыуын, факттарҙың дөрөҫлөгөн, эҙмә-эҙлекле бирелешен, һөйләмдәрҙең грамматик бәйләнешен, интонацион яҡтан дөрөҫ, тасуири яңғырауын.
Яҙыу:
- тексҡа ярашлы талаптарҙы үтәп, яҙма рәүештә үҙ фекереңде бирергә;
- публицистик, әҙәби текстар буйынса изложение яҙырға;
- изложение тексына инша элементтарын индерә белергә;
- уҡыған йәки тыңлаған текст буйынса ҙур булмаған инша яҙырға;
- мәҡәләләргә тезис һәм конспект төҙөргә;
- яҙма эштәрҙең хаталарын табып, йөкмәткеһен төҙәтә, камиллаштыра белергә;
- текстарға анализ яһарға.
Фонетика һәм орфоэпия:
- орфоэпик нормаларҙы һаҡлап, дөрөҫ һөйләргә;
- үҙеңдең һәм башҡаларҙың телмәрен дөрөҫ һөйләү нормаларына ярашлы анализларға;
Һүҙьяһалыш:
- һүҙ составы буйынса анализларға;
- һүҙьяһалыш ысулдарын билдәләй белергә;
Лексикология һәм фразеология:
- һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен аңлата белергә;
- төрлө аңлатмалы һүҙлектәр менән ҡулланырға;
- терминдарҙы дөрөҫ ҡулланырға;

- телмәрҙе байытыусы сараларҙы ҡулланырға, текстарҙа билдәләргә;
Морфология:
- һүҙ төркөмдәрен дөрөҫ билдәләргә;
- уларҙың телмәрҙәге ролен асыҡларға, морфологик анализ эшләргә;
Орфография:
- орфографик ҡағиҙәләрҙе ҡуллана белергә;
- текстарҙа табып аңлатырға;
Синтаксис и пунктуация:
- ҡушма һәм ябай һөйләмдәрҙе айырырға;
- әйтелеү маҡсатына ярашлы һөйләмдәрҙе дөрөҫ уҡырға;
- схемалар төҙөргә, бирелгән схемалар буйынса һөйләмдәр төҙөргә;
- текста тура телмәрҙе, цитаталарҙы дөрөҫ ҡулланырға;
- һөйләмдәргә синтаксик һәм пунктуацион анализ яһарға;
- тыныш билдәләренең ҡуйылышын график билдәләр, схемалар менән күрһәтергә;
- пунктуацион ҡағиҙәләргә үҙ аллы миҫалдар һайлап алырға йәки уйларға.

## III. Уҡытыу предметының йөкмәткеһе

5-се класс

Тел – аралашыуҙың мөһим сараһы. Туған телебеҙ – башҡорт теле. Уның төрки телдәре ғаиләһенә ҡарауы.

Морфология. Һүҙҙең морфологик киҫәктәре. Һүҙҙең морфологик киҫәктәре: тамыр һәм ялғауҙар. Исемдәрҙең һан, килеш менән үҙгәреше. Сифат. Сифат дәрәжәләре. Һан.

Синтаксис һәм пунктуация. Телмәр мәҙәниәте. Синтаксис һәм тыныш билдәләре (пунктуация) тураһында төшөнсә. Һүҙбәйләнеш, һүҙбәйләнештә эйәртеүсе һәм эйәреүсе һүҙҙәр.

Хәбәр, һорау, өндәү, бойороҡ һөйләмдәр.Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре.Йыйнаҡ һәм таркау һөйләмдәр. Текст.

Өндәш һүҙҙәр, улар эргәһендә тыныш билдәләре.

Ҡушма һөйләм тураһында төшөнсә(һәр ябай һөйләмдә эйәһе лә, хәбәре лә булған ҡушма һөйләмдәр менән эш ителә), улар араһында һәм, ә, ләкин, йә, йәки, әгәр, шуның өсөн, шуға күрә, сөнки теркәүестәре алдында өтөр ҡуйып яҙыу.

Тура телмәр. Тура телмәрле һөйләмдәрҙә тыныш билдәләренең ҡуйылышы.

Фонетика һәм графика. Орфография. Орфоэпия. Телмәр мәҙәниәте.

Фонетика тураһында төшөнсә.Өндәрҙең һуҙынҡыларға һәм тартынҡыларға, яңғырау һәм һаңғырау тартынҡыларға бүленеүе.

Өн һәм хәреф. Өндәрҙең яҙыуҙа хәрефтәр менән белдерелеүе. Алфавит. Орфография тураһында төшөнсә. Йомшаҡлыҡ билдәһе - ь, уның дөрөҫ яҙылышы. Һуҙынҡыларҙың һәм тартынҡыларҙың дөрөҫ яҙылышы.Ижек, уның төрҙәре, һүҙҙәрҙе юлдан юлға күсереү.

Баҫым. Баҫымлы, баҫымһыҙ ижектәр. Логик баҫым. Рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә баҫым.

Лексика.Телмәр мәҙәниәте. Лексика тураһында дөйөм төшөнсә.Телдең лексик системаһының байлығын аңлау. Мәктәп һүҙлектәре.Һүҙҙең лексик мәғәнәһе. Һүҙҙәрҙең тура һәм күсмә мәғәнәлә ҡулланылыуы.Синонимдар. Антонимдар. Омонимдар.

Һүҙьяһалыш. Орфография. Телмәр мәҙәниәте. Тамыр һәм ялғауҙар. Яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙар.

Һүҙьяһалыш. Һүҙьяһалыш юлдары.Ҡушма һүҙҙәр, уларҙың дөрөҫ яҙылышы.

Эш ҡағыҙҙарын яҙырға өйрәтеү. Башҡорт теленең стилдәре тураһында төшөнсә менән танышыу. Фәнни һәм художестволы(күркәм) әҙәбиәт стилдәрен айырыу.

Һүҙ төркөмдәре тураһында төшөнсә.Телмәр мәҙәниәте.

Үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙҙәр.

Исем һәм уны телмәрҙә ҡулланыу. Исемдең дөйөм мәғәнәһе, морфологик билдәләре һәм синтаксик вазифалары.Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр. Яңғыҙлыҡ исемдәрҙең ҙур хәреф менән яҙылышы. Исемдәрҙең яһалышы.

Проект эше: “Башҡортостанда туризм”.

Ҡылым.Уны телмәрҙә ҡулланыу. Ҡылымдың дөйөм мәғәнәһе һәм морфологик билдәләре, синтаксик вазифалары.

Үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдар.Ҡылымдарҙың яһалыу юлдары.Ҡылымдың затлы формалары. Хәбәр, бойороҡ, шарт, теләк һөйкәлеше ҡылымдары.
Үтелгәндәрҙе ҡабатлау һәм дөйөмләштереү. Һүҙбәйләнеш һәм һөйләм. Фонетика һәм лексика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.
Проект эше: “Телебеҙҙе һаҡлайыҡ”.
Һүҙ төркөмдәре.Лексика.Һүҙьяһалыш.

6-сы класс
Әсә теле тураһында әңгәмә.
Синтаксис һәм пунктуация. Фонетика, лексика.Һүҙьяһалыш.
Лексика.Килеп сығышы яғынан башҡорт теленең һүҙлек составы.Үҙләштерелгән һүҙҙәр, нығынған һүҙбәйләнештәр, диалект һүҙҙәр.
Исем һәм уны телмәрҙә ҡулланыу.Исем тураһында үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Исемдәрҙең эйәлек заты менән хәбәрлек заты. Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше.
Эш ҡағыҙҙарын яҙырға өйрәтеү. Автобиография яҙырға өйрәнеү.
Сифат һәм уны телмәрҙә ҡулланыу.Сифаттың мәғәнәһе, морфологик билдәләре, синтаксик вазифаһы.Телмәрҙә синоним, күсмә мәғәнәле сифаттарҙы ҡулланыу.
Һан һәм уны телмәрҙә ҡулланыу.Һандың мәғәнәһе, морфологик билдәләре, синтаксик вазифаһы.Һыҙыҡ аша яҙыла торған ҡушма һандарҙы дөрөҫ яҙыу.
Алмаш һәм уны телмәрҙә ҡулланыу. Алмаштың телмәрҙә үтәгән вазифаһы.Телмәрҙә алмаштарҙы ҡулланыу.
Ҡылым.Морфологик билдәләре, синтаксик вазифалары. Ҡылым төркөмсәләре. Сифат ҡылымдарҙың хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарынан айырмаһы.Ҡылым йүнәлештәре. Ҡылым күләмдәре. Ҡылым рәүешлеге.Ҡылымды телмәрҙә ҡулланыу.
Рәүеш һәм уны телмәрҙә ҡулланыу. Рәүеш мәғәнәһе, морфологик билдәләре, синтаксик вазифаһы. Рәүештең сифат менән оҡшаш һәм айырмалы яҡтары. Рәүеш дәрәжәләре. Рәүештәрҙең яһалышы.
Теркәүестәр. Теркәүестәр һәм уларҙың телмәрҙәге функцияһы.Теркәүестәрҙең морфологик, синтаксик роле.
Бәйләүестәр һәм уларҙы телмәрҙә ҡулланыу.Бәйләүестәр тураһында дөйөм төшөнсә. Бәйләүестәрҙең телмәрҙәге вазифаһы. Бәйләүестәрҙең бүленеше.
Киҫәксәләр һәм уларҙы телмәрҙә ҡулланыу. Киҫәксә тураһында төшөнсә. Киҫәксәләрҙең бүленеше. Киҫәксәләрҙең дөрөҫ яҙылышы.
Проект эше: “Ярҙамсы һүҙҙәр илендә”.
Мөнәсәбәт һүҙҙәр һәм уларҙы телмәрҙә ҡулланыу.Мөнәсәбәт һүҙҙәр тураһында төшөнсә. Мөнәсәбәт һүҙҙәрҙең синтаксик роле.
Ымлыҡтар һәм уларҙы телмәрҙә ҡулланыу. Ымлыҡтар тураһында төшөнсә. Ымлыҡтарҙың төрҙәре.Ымлыҡтарҙы телмәрҙә ҡулланыу.
Ярҙамсы һәм үҙ аллы һүҙ төркөмдәренең телмәрҙәге роле.
Проект эше: “Башҡорт теле – минең туған телем”.

7-се класс
Тел тураһында әңгәмә.
Лексика, фонетика, морфология, орфография .Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Фонетика, орфография . Морфология һәм лексика. Тамыр һәм яһалма һүҙҙәр. Синтаксис һәм пунктуация, һүҙбәйләнеш, һөйләм, текст, һөйләмдә һүҙҙәр бәйләнеше.
Һүҙбәйләнеш, уның һөйләмдән айырмаһы, һүҙбәйләнештәрҙең төрҙәре тураһында төшөнсә. Һүҙбәйләнеш һәм ҡушма һүҙ.Һөйләмдәге һүҙҙәр араһында теҙмә һәм эйәртеүле бәйләнеш. Эйәртеүле бәйләнештәрҙең төрҙәре; башҡарылыу, йәнәшәлек, һөйкәлеү, эйә менән хәбәр араһында ярашыу бәйләнеше. Текст һәм уның өлөштәре, унда һөйләмдең үҙ-ара бәйләнеү юлдары.
Ике составлы һәм бер составлы һөйләмдәр тураһында дөйөм төшөнсә. Һөйләмдең баш киҫәктәре. Эйә менән хәбәр араһында һыҙыҡ.
Бер составлы һөйләмдәр тураһында дөйөм төшөнсә. Бер составлы һөйләмдәрҙең төрҙәре.

Тулы һәм кәм һөйләмдәр тураһында дөйөм төшөнсә. Кәм һөйләмдәрҙең бер составлы һөйләмдәрҙән айырмаһы.
Тиң киҫәкле һөйләмдәр.Интонация менән бәйләнеп килгән тиң киҫәктәр, теркәүес менән бәйләнеп килгән тиң киҫәктәр.Тиң киҫәктәр эргәһендә дөйөмләштереүсе һүҙҙәр.
Проект эше: “Тиң киҫәкле һөйләмдәр”.
Һөйләмдең айырымланған киҫәге. Айырымланыу тураһында дөйөм төшөнсә.Эйәрсән киҫәктәрҙең айырымланыуы.
Өндәш һүҙе, инеш һүҙе, инеш һөйләме һәм ымлыҡтар булған һөйләмдәр.
Өндәш һүҙҙәр.Өндәш һүҙҙәр, инеш һүҙҙәр, инеш һөйләмдәр һәм ымлыҡтар булған һөйләмдәрҙе һәм текстарҙы дөрөҫ интонация менән уҡыу.
Тура һәм ситләтелгән телмәр.Тура телмәр.Тура телмәр эсендә автор һүҙҙәре. Тура телмәрҙә тыныш билдәләре. Ситләтелгән телмәр, уның тура телмәрҙән айырмаһы. Цитата.Уның янында тыныш билдәләре. Диалог.
Эш ҡағыҙҙарын яҙырға өйрәтеү.Текстарҙың стилен билдәләүгә күнегеүҙәр.
Ябай һөйләм синтаксисы. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау.Ябай һөйләмдәрҙе телмәрҙе ҡулланыу. Тиң киҫәкле һөйләмдәрҙә тыныш билдәләренең ҡуйылышы.Тиң киҫәкле һөйләмдәрҙе телмәрҙә ҡулланыу.
Проект эше: “Ябай һөйләмдәрҙең телмәрҙәге роле.”

8-се класс

Ҡушма һөйләм. Синтаксис буйынса ике составлы һөйләмдәрҙе, тиң киҫәкле һөйләмдәрҙе, айырымланған эйәрсән киҫәкле һөйләмде ҡабатлау.
Теҙмә ҡушма һөйләмдәр.Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәр тураһында дөйөм төшөнсә, уларҙа тыныш билдәләре.Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәр тураһында дөйөм төшөнсә, уларҙа тыныш билдәләре.Теркәүесле һәм теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу, уларҙы һөйләү һәм яҙма телмәрҙә ҡулланыу күнекмәләрен үҫтереү.
Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр.Баш һәм эйәрсән һөйләмдәр. Эйәрсән һөйләмдәрҙең баш һөйләмгә бәйләнеп килеү ысулдары. Эйәрсән һөйләм төрҙәре, улар эргәһендә тыныш билдәләре.Һөйләм киҫәктәрен, айырымланған эйәрсән киҫәктәрҙе, хәл әйтемдәрен, эйәрсән һөйләмдәрҙе, теркәүесһеҙ һәм теркәүесле ҡушма һөйләмдәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу, уларҙы телмәрҙә стилистик маҡсатта ҡулланыу күнекмәләре.
Проект эше: “Башҡорт теле ғорур яңғырай”.
Проект эше: “Ауылыбыҙҙың матур йолалары”.
Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр.Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр тураһында дөйөм төшөнсә. Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.
Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр тураһында дөйөм төшөнсә. Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре. Теҙем тураһында дөйөм төшөнсә. Уларҙың стилистик роле.
Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу күнекмәһе; шул тип һөйләмдәрҙе һөйләү һәм яҙма телмәрҙә ҡулланыу күнекмәһен үҫтереү.
Тыныш билдәләре ҡуйылышын ҡабатлау, дөйөмләштереү.
Синтаксис һәм пунктуация буйынса йыл буйына үтелгәндәрҙе ҡабатлау, йомғаҡлау.
Эш ҡағыҙҙарын яҙырға өйрәтеү. Текстарҙың стилен билдәләүгә күнегеүҙәр.
Проект эше: “Һуғыш осоро балалары”.

9-сы класс

Тел тураһында дөйөм төшөнсә.
Тел фәнен ни өсөн өйрәнергә кәрәк? Башҡорт теле – башҡорт халҡының милли теле. Башҡорт теле башҡа ҡәрҙәш телдәр араһынада. Йәмғиәт тормошонда телдең роле. Тел- үҫә барусы ижтимағи күренеш.
Башҡорт әҙәби теле һәм уның үҫеше. Әҙәби тел һәм диалект тураһында төшөнсә. Ике теллелек. Әҙәби тел нормаларын таный, уларға ярашлы һөйләй һәм яҙа белеү.
Башҡорт әҙәби теленең стилдәре. Стилистика тураһында дөйөм төшөнсә. Әҙәби телдең стилдәре. Һүрәтләү саралары - күркәм әҙәбиәт стиле саралары. Төрлө стилгә ҡараған текстар һайларға өйрәтеү. Стилистик яҡтан төҙәк һәм хаталы текстарҙы сағыштырып, уларға стилистик анализ

яһарға өйрәтеү. Телмәр төҙөгәндә, стилистик маҡсатты күҙ уңында тотоп, синоним һүҙҙәрҙе, морфологик, синтаксик синонимдарҙы дөрөҫ һайларға һәм ҡулланырға өйрәтеү. Һүрәтләү саралары. Текстарҙан һүрәтләү сараларын таптырыу, һөйләү, яҙма телмәрҙә уларҙы ҡулланырға өйрәтеү.
5-9 класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау һәм тәртипкә килтереү.
Фонетика, орфоэпия, орфография (телмәр ағышындағы төрлө фонетик күренештәрҙең, ялғауҙарҙың, ҡушма һүҙҙәрҙең әйтелеше һәм яҙылышы).Лексика.Морфология.Синтаксис һәм пунктуация.
Проект эше: “Илкәйемдең хозур тәбиғәтен нисек һаҡларға?”
Проект эше: “Ҡылымдарҙы телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу”.

## III.Календарь –тематик план

Тематик план (5-се класс)

| № п/п | Бүлек темаһы | Сәғәттәр һаны | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|
| 1 | Башланғыс кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 5 | Шул иҫәптән диктант -1 |
| 2 | Синтаксис һәм пунктуация. Телмәр мәҙәниәте. | 13 | Шул иҫәптән изложение - 1 |
| 3 | Фонетика һәм графика. Орфография. Телмәр мәҙәниәте. | 18 | Шул иҫәптән инша – 1<br>диктант – 1<br>изложение -1 |
| 4 | Лексика.Телмәр мәҙәниәте. | 6 | Шул иҫәптән инша- 1 |
| 5 | Һүҙьяһалыш һәм орфография. Телмәр мәҙәниәте. | 6 | Шул иҫәптән эш ҡағыҙҙарын яҙырға өйрәтеү – 1<br>диктант -1 |
| 6 | Морфология.Орфография.<br>Телмәр мәҙәниәте. | 9 | Шул иҫәптән изложение -1<br>инша-1 проект эше -1 |
| 7 | Ҡылым.Уны телмәрҙә ҡулланыу. | 11 | Шул иҫәптән диктант-1<br>проект эше -1 |
| 8 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау һәм дөйөмләштереү | 2 | |
| 9 | Бөтәһе: | 70 | |

Тематик план (6-сы класс)

| № п/п | Бүлек | Сәғәттәр һаны | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|
| 1 | Туған тел тураһында әңгәмә. | 1 | |
| 2 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Синтаксис һәм пунктуация. Фонетика, лексика. Һүҙьяһалыш. | 2 | Шул иҫәптән диктант -1 |
| 3 | Лексика. | 6 | |
| 4 | Исем. | 8 | Шул иҫәптән изложение -1<br>эш ҡағыҙҙарын яҙырға өйрәтеү – 1 |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 5 | Сифат. | 6 | Шул иҫәптән инша- 1 |
| 6 | Һан. | 5 | Шул иҫәптән диктант -1 |
| 7 | Алмаш. | 5 | |
| 8 | Ҡылым. | 18 | Шул иҫәптән изложение- 1 диктант -1 |
| 9 | Рәүеш. | 4 | |
| 10 | Теркәүестәр. | 3 | Шул иҫәптән инша- 1 |
| 11 | Бәйләүестәр һәм уларҙы телмәрҙә ҡулланыу. | 2 | Шул иҫәптән инша- 1 |
| 12 | Киҫәксәләр һәм уларҙы телмәрҙә ҡулланыу. | 3 | Шул иҫәптән изложение- 1 проект эше -1 |
| 13 | Мөнәсәбәт һүҙҙәр һәм уларҙы телмәрҙә ҡулланыу. | 2 | Шул иҫәптән диктант -1 |
| 14 | Ымлыҡтар һәм уларҙы телмәрҙә ҡулланыу. | 1 | |
| 15 | Оҡшатыу һүҙҙәре һәм уларҙы телмәрҙә ҡулланыу. | 1 | |
| 16 | Үтелгәнде ҡабатлау һәм системалаштырыу. | 3 | Шул иҫәптән проект эше -1 |
| 17 | Бөтәһе: | 70 | |

Тематик план (7-се класс)

| № п/п | Бүлек | Сәғәттәр һаны | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|
| 1 | Тел тураһында әңгәмә. | 1 | |
| 2 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау.Лексика, фонетика, морфология, орфография. | 4 | Шул иҫәптән диктант-1 |
| 3 | Синтаксис. Һүҙбәйләнеш. | 11 | Шул иҫәптән изложение -1 |
| 4 | Ябай һөйләм. | 15 | Шул иҫәптән инша -1 диктант-1 |
| 5 | Ике һәм бер составлы һөйләмдәр. | 13 | Шул иҫәптән проект эше -1 инша -1 |
| 6 | Һөйләм киҫәктәре менән грамматик бәйләнештә булмаған һүҙҙәр. | 7 | Шул иҫәптән диктант-1 изложение -1 |
| 7 | Һөйләмдең айырымланған эйәрсән киҫәктәре. | 15 | Шул иҫәптән изложение -1 инша -1 диктант-1 эш ҡағыҙҙарын яҙырға өйрәтеү - 1 |
| 8 | Ябай һөйләм синтаксисы. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 4 | Шул иҫәптән проект эше -1 |
| 9 | Бөтәһе: | 70 | |

Тематик план (8-се класс)

| № п/п | Бүлек | Сәғәттәр һаны | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|
| 1 | Синтаксис буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 5 | Шул иҫәптән диктант-1 |
| 2 | Ҡушма һөйләм. | 10 | Шул иҫәптән изложение- 1<br>инша -1 |
| 3 | Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр. | 23 | Шул иҫәптән диктант- 1<br>инша -1<br>проект эше -2 |
| 4 | Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр. | 10 | Шул иҫәптән изложение -1 |
| 5 | Тыныш билдәләре ҡуйылышын ҡабатлау, дөйөмләштереү. | 10 | Шул иҫәптән<br>диктант-1 проект эше -1<br>инша -1 |
| 6 | V-VIII кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 12 | Шул иҫәптән эш ҡағыҙҙарын яҙырға өйрәтеү – 1<br>изложение- 1<br>диктант-1 |
| 9 | Бөтәһе: | 70 | |

Тематик план (9-сы класс)

| № | Бүлек | Сәғәттәр һаны | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|
| 1 | Тел тураһында дөйөм төшөнсә. | 5 | Шул иҫәптән диктант- 1 |
| 2 | Башҡорт әҙәби теле. | 6 | Шул иҫәптән инша – 1 |
| 3 | Башҡорт әҙәби теленең стилдәре. | 18 | Шул иҫәптән изложение -1<br>диктант -1<br>ижади эш -2 |
| 4 | Һүрәтләү саралары. | 20 | Шул иҫәптән<br>инша – 1<br>изложение -1<br>диктант -1 |
| 5 | 5-9-сы класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау һәм тәртипкә килтереү. | 17 | Шул иҫәптән изложение-1<br>инша -1<br>диктант- 1<br>проект эше -1 |
| 6 | Бөтәһе: | 66 | |

Эш программаһы арауыҡ аттестацияһын түбәндәге формала үткәреүҙе күҙаллай:

5-се класс:1-се сирек – диктант -1сәғәт; 2-се сирек – диктант, өҫтәлмә эш -1сәғәт; 3-сө сирек – диктант, өҫтәлмә эш -1 сәғәт; 4-се сирек – диктант, өҫтәлмә эш -1сәғәт

6-сы класс:1-се сирек - диктант-1сәғәт; 2-се сирек – диктант, өҫтәлмә эш -1сәғәт; 3-сө сирек – диктант, өҫтәлмә эш- 1 сәғәт; 4-се сирек – диктант, өҫтәлмә эш -1сәғәт

7-се класс: 1-се сирек - диктант-1сәғәт; 2-се сирек – диктант, өҫтәлмә эш -1сәғәт; 3-сө сирек диктант, өҫтәлмә эш - 1 сәғәт ; 4-се сирек – диктант, өҫтәлмә эш -1сәғәт

8-се класс: 1-се сирек – диктант -1сәғәт; 2-се сирек – диктант, өҫтәлмә эш -1сәғәт; 3-сө сирек – диктант, өҫтәлмә эш -1 сәғәт; 4-се сирек – диктант, өҫтәлмә эш -1сәғәт

9-сы класс: 1-се сирек – диктант -1сәғәт; 2-се сирек – диктант, өҫтәлмә эш -1сәғәт; 3-сө сирек – диктант, өҫтәлмә эш -1 сәғәт; 4-се сирек – диктант, өҫтәлмә эш -1сәғәт